# «Янғындан һаҡ бул»

Акилова Р.М.

**Маҡсат:** Балаларға янғындан һаҡланыу сараларын, янғынды тәжрибәләр ярҙамында нисек һүндереп булыуын анлатыу,шырпы ниндәй ҙур бәлә килтереуен күрһәтеп аңлатыу.

## Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге.

Борон-борон заманда йәшәгән ти бер ҡуян
Ҡуян иртәнсәк торған
Биттәрен,ҡулын йыуған
Гимнастика эшләгән.
Эшкә китергә булған
Плитәгә сәйнүк ҡуйған
Бына утты ҡабыҙған
Тиҙ-тиҙ генә салбарын
Үтекләп алғыһы килгән
Ләкин бына шул саҡта
Шылтыраған телефон
Ҡуян нык ҡабаланған
Эшка китеп тә барған
Газ плитә һүнмәй ҡалған
Үтек тә шулай ҡалған
Бына инде шул саҡта
Өйҙә ҙур янғын сыҡҡан.
Тәрбиәсе бөтә ергә ут ҡуйып сыға. Ҡуян йугереп инә.
Балалар, минең өйөм янып китте, ни эшләргә инде миңә (илай)?

*Тәрбиәсе:*
Балалар, беҙгә бит янғын һүндереүселәргә шылтыратырға кәрәк.
Таҡтала яҙыуҙар: 01,02,03,04.
Ниндәй номерға шылтыратырға кәрәк? (01.)
Афарин,балалар.
Шиғыр тыңлағыҙ әле.
Әгәр янғын була икән
Ҡалғансы көл-кумергә
Бик тиҙ генә сараһын күр
Шылтырат һин 01-гә.

*Ҡуян:*
Өйҙәгеҙ,балалар, тиҙ генә янғын һүндереүселәрҙе саҡырайыҡ.
Балалар ҡуян менән янғын һүндереүселәргә шылтыраталар.
Янғын һүндереүселәрҙең машина тауышы ишетлә. Янғын һүндереүселәр инә.
Һаумыһығыһ,балалар! Мине таныныгыҙмы,балалар?
Ут менән көрәшәбеҙ беҙ,
Шуға көслө, ҡыйыубыҙ.
Бар кешегә кәрәк һөнәр-

Әйтегеҙсе,беҙ кемдәр?
Янғын һүндереүселәр!

*Янғын һүндереүсе:*
Балалар,әйҙәгеҙ,ҡуянға ярҙам итәйек. Янғынды нимә меән һүндереп була?
Һыу менән.
Әйе,балалар,әйҙәгеҙ,һыу тамсылары булып ҡуяндың өйөн янғындан ҡотҡарайыҡ.
Музыка уйнай. Балалар, ҡуян, янғын һүндереүсе һыу тамсылары булып ҡуяндың өйөн янғындан һүндерәләр.
Янғын һүндереусе балаларҙан һорай.
Балалар, ҡуяндың өйө ни өсөн янып китте?
Ҡуян газ плитәне,үтекте һүндермәй китте.
Әйе,ҡуян газ плитә менән үтекте һүндерергә онотто. Бына шуның өсөн дә ҙур бәлә сыҡты, ҡуяндың өйө янып китте.

*Янғын һүндереүсе:*
Ҡуян, һин аңланыңмы инде, ни өсөн янғын сыкты?
Әйе, аңланым. Башҡа улай электр приборзарын һүндермәй китмәйем.
Афарин,ҡуян.

*Ҡуян:*
Ярай,балалар,мин һеҙҙең меән һаубуллашайым. Һау булығыҙ!
Ҡуян сығып китә.

*Янғын һүндереүсе:*
Балалар,һеҙҙең янғын һүндереүселәр булғығыҙ киләме?
- Әйе.
Улайһа беҙгә һынауҙар аша үтер кәрәк.

**Физминутка.**

Шырпы менән уйнарға
Һис кенә лә кәрәкмәй (бармаҡ янайҙар)
Әгәр инде тыңламаһаң
Сыға өйҙә ҙур янғын (ҡулды өҫкә күтәрәбеҙ, бармаҡтарҙы ҡыбырлатабыҙ)
Янғын көсәйә
Янғын көсәйә (ҡул менән күрһәтәбеҙ)
Бына ел булып
Утҡа өрәбеҙ (өрәбеҙ)
Һәм янғын һүнә.
Ура! Ура! Ура! (урында һикерәбеҙ)

<u>1 һынау. Һүрәттәр ҡуйыла</u>: янғын һүндереүсе машина, тиҙ ярҙам машинаһы,полиция машинаһы, газ службаһы машинаһы.
Балалар, янғын сыҡҡанда ниндәй машина килә? Һүрәтен табығыҙ.

<u>2 һынау. Тәжрибәләр эшләйбеҙ.</u>

Тәжрибәләр өсөн тупраҡ, ҡом,һыу,быяла һауыт ҡуйылған.
Һауытта янғын. (һауыт тирәләй ҡыҙыл материал ҡуйылған)
Янғын сыҡҡан һауытҡа тәүҙә тупраҡ,ҡом һалабыҙ,һыу һибеп ҡарайбыҙ. Иң аҙаҡтан «утты» быяла һауыт менән ябабыҙ.
Шулай итеп,балалар, ниндәй матдәләр менән утты һүндереп була?
Тупраҡ,ҡом,һыу менән.
Ә ни өсөн утты һауыт менән ҡапланыҡ?
Һауа килмәһә ут һүнә.
Әйе, афарин балалар.

<u>3 һынау. Уйын « Ярай, ярамай»</u>
Балалар,мин һеҙгә һөйләмдәр уҡыйым, әгәр балалар дөрөҫ эшләһәр, һеҙ сәпәкәй итәгеҙ,әгәр дөрөҫ эшләмәһәр, аяҡ менән тыпырлайбыҙ.

1) Шырпы менән уйнарға ярамай. ( сәпәкәй итәбеҙ)
2) Шырпы менән күңелле
Уның менән уйнайым. (тыпырлайбыҙ)
3) Балаларға үтекте яндырыға ярамай. (сәпәкәй итәбеҙ)
4) Ут сыҡҡанын күргәс. Һин шылтырат 02-гә. (тыпырлайбыҙ)
5) Ут сыға ҡалһа полиция машинаһы килә. ( тыпырлайбыҙ)
6) Утты һыу менән һүндерәбеҙ. ( сәпәкәй итәбеҙ)

- Балалар, беҙ 3 һынауҙы ла уңышлы үттек. Афариндар! Һеҙ ысын янғын һүндереүселәр.
Медальондар бирә.

**Йомғаҡлау.**
Шулай итеп балалар, ниндәй сәбәптән ҡуяндын өйө янды?
Янғын һүндереүселәрҙе ниндәй телефон номерын йыйып саҡырып була?
Янғынды нимә менән һүндереп була? Афариндар!